# Дидактик уйын „Серле әкиәт донъяһында“ (башҡорт халыҡ әкиәттәре)




Башҡортостан республикаһы Өфө ҡалаһының “Аҡбуҙат”

75-се башҡорт балалар баҡсаһы” тәрбиәсеһе Мәмбәтова Зилиә Роберт ҡыҙы

Әкиәт – халыҡ ижадының иң киң таралған жанры. Ул баланың телмәрен байыта, һүҙ байлығын арттыра, хәтерен үҫтерә. Әкиәт балаларҙы тәрбиәләүҙә төп сараларҙың береһе булып тора. Шуның өсөн дә мин дидактик уйынымды башҡорт халыҡ әкиәттәре менән алдым. „Серле әкиәт донъяһында“ тип аталған дидактик уйын 4 әкиәтте үҙ эсенә ала: „Торна менән төлкө“, „Ҡуян менән арыҫлан“, „Етем төлкө“, „Айыу менән бал ҡорттары“.

Маҡсат: башҡорт халыҡ әкиәттәре аша балаларға тәрбиә биреү, уларҙың телмәрен үҫтереү.

# Серле әкиәт донъяһында



Башҡорт халыҡ әкиәттәре

## „Һүрәттәр ярҙамында әкиәтте һөйлә“

Маҡсат: һүрәттәргә ҡарап әкиәтте танырға өйрәнеү, баланың аң-зиһенен, фекерләүен, күҙаллау һәләтен, телмәрен һәм хәтерен үҫтереү

Уйын тәртибе.

Тәрбиәсе балаларға һүрәттәр күрһәтә. Балалар әкиәттәң исемен әйтәләр һәм әкиәтте һөйләйҙәр



# „Пазл төҙө“

Маҡсат: „Торна менән төлкө“ әкиәтен өйрәнгәндән һуң әкиәтте ҡабатлау, балаларҙың аҡыл-зиһенен, күҙаллауын, иғтибарын, хәтерен, фекерләүен һәм телмәрен үҫтереү

Уйын тәртибе.

Балаларға пазл һәм уның өлгөһө таратып бирелә. Балалар пазлды йыялар. Һәм килеп сыҡҡан әкиәттең исемен әйтәләр.


Пазл төзө

# „Күләгәһен тап“

Маҡсат: балаларҙы предметтарҙы, күләгәһенә ҡарап, танып белергә өйрәтеү. Балаларҙың аҡыл-зиһенен, күҙаллауын, иғтибарын, хәтерен, фекерләүен һәм телмәрен үҫтереү.

Уйын тәртибе.

Балаларға предметтар төшөрөлгән һүрәт һәм уның күләгәләре бирелә. Балалар предметтың күләгәһен табып, төҫлө һүрәт янына һала.


Күләгәһен тап




# Ҡуян менән арыҫлан

Борон-борон заманда бер арыҫлан булған. Башҡа йәнлектәр арыҫландан бик ҡурҡып ҡына йәшәгәндәр. Ни өсөн тиһәң, арыҫлан уларға бер ҙә көн күрһәтмәй икән, ҡайҙа осраһа* шунда тота ла йығып ашай, ти, үҙҙәрен. Арыҫлан йәнлектәрҙең берәүһен тотоп ашаған саҡта, бишәүһе йөрәге ярылып үлә, ти. Ҡасып ҡотолорға бер әмәл булмаған, ти, был йыртҡыстан. Арыҫландың шулай теңкәгә тейеүенән тәҡәттәре ҡалмағас, бер бер көндө урмандағы булған кейек-йәнлектәр йыйылышып, кәңәш ҡорҙолар, ти. - Был арыҫлан бөтөрә бит беҙҙе, былай булһа. Ул беребеҙҙе тотоп ашағанда, бишәүебеҙ йөрәге ярылып үлә. Ни эшләйбеҙ, ағай-эне? — тип әйтте, ти, төлкө. Беҙ көн һайын йәрәбә һалайыҡ. Йәрәбә кемгә сыкһа, шул арыҫландың ҡорбаны булыр, - тип әйтте, ти, айыу. Шулай итеп, былар көн һайын йәрәбә һалырға булдылар, ти. Был хаҡта арыҫландың үҙенә лә хәбәр иттеләр, ти. Беренсе көн йәрәбә ҡуянға сыкты, ти. Ҡуян тороп, йәнлектәргә: Ағайҙар! Беҙгә былай итеп һәр ваҡыт арыҫландың ҡорбаны булып үлеү бер ҙә килешкән эш түгел. Берәй хәйлә ҡороп, шунан ҡотолоу яғын ҡарарға кәрәк, — тип әйткән булды, ти. Төлкө ҡуяндың һүҙен тыңлап торҙо ла: Кит, хәсрәт! Һинме һуң хәйлә ҡороп, арыҫланды алдар йән! Белер-белмәҫ теле менән хәбәр һөйләп торған булаһың, асыуымды килтереп, - тип ырлап ташланы, ти. Ҡуян арыҫлан янына китте, ти. Бер ҙә ҡабаланманы, ти. Арыҫлан бик асыуланды, ти, ҡуянға. Нишә улай яй йөрөйһөң һин? Ата-бабаларың яй йөрөмәнеләр. Һин иртәнсәк үк килергә тейеш инең, хәҙер төш етеп килә, - тип ырлап ташланы, ти, ҡуянды. Ҡуян ҡурҡып ҡына: Мине һиңә көндөҙгөләккә ашарға ебәргәйнеләр, икенсе бер ҡуян һиңә иртәнсәк килергә тейеш ине. Килә ятҡанда юлда башҡа арыҫлан осраған да теге ҡуянды тотоп ашаған. Бына мин әле һиңә килә ятҡанда шул арыҫланға тап булдым: «Ҡайҙа китеп бараһың? » — тине. Мин уға: «Үҙемдең хужама — арыҫлан ағайға барам», — тип яуап бирҙем. Шулай тигәс, теге асыуланып, әйтә башланы: «Кем бында минән башҡа хужа булырға йөрөй тағы?» — ти. Мин унан көскә-көскә генә ҡасып ҡотолдом. Шуға күрә һиңә ҡалып килдем, — тигән булды, ти, ҡуян. Арыҫлан ҡуяндан тегенең ҡайҙа йәшәгәнен һораны, ти. Ул бынан алыҫ түгел, анау яҡта, - тип яуап бирҙе, ти, ҡуян. Әйҙә, алып бар әле һин мине уның янына. Мин уға күрһәтәйем әле бында кем хужа икәнен! — тип әйтте, ти, арыҫлан, асыуланып. Ҡуян алдан китте, ти, уның артынан арыҫлан төштө, ти. Былар бик тәрән бер ҡоҙоҡ янына килделәр, ти. Бына ошо ҡоҙоҡтоң эсендә ултыра теге яман арыҫлан, тигән булды, ти, ҡуян ҡурҡып ҡына. Арыҫлан ҡоҙоҡтоң эсенә ҡараһа, ысынлап та тап үҙенә оҡшаған икенсе бер арыҫланды күрҙе, ти. Арыҫлан ҡотороноп, үкерә башланы, ти. Дөмөктөрәйем әле быны! — тип, ғәйрәтләнеп, ҡоҙоҡ эсенә һикерҙе, шунда шомборлап батты ла үлде, ти. Шатлығы эсенә һыймаған ҡуян, был хәбәрҙе йәнлектәргә тиҙерәк белдерер өсөн, һикерә-һикерә ҡайтып китте, ти.

Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт